# ИНЖИЛ

УЧРЕЖДЕНИЕ РОССИЙСКОЙ АКАДЕМИИ НАУК
ИНСТИТУТ ЯЗЫКОЗНАНИЯ РАН

# ИНЖИЛ

Изге Яҙманы тәржемә итеү институты
Мәскәү, 2014

# ИНЖИЛ

**башҡорт телендә**

Веб-сайттың адресы www.ibt.org.ru

ISBN 978-5-93943-201-6

© Институт перевода Библии, 2014

# Инеш һүҙ

*Ҡәҙерле уҡыусы!*

Һин ҡулыңа алған был китап – Инжилдең (Яңы Ғәһедтең) башҡорт теленә тәржемәһе. Яңы Ғәһедтән һәм Иҫке Ғәһедтән торған Изге Яҙма, йәғни Библия ер йөҙөндәге иң уҡымлы китаптарҙың береһе.

Яңы Ғәһедтең төп эстәлеге – Ғайса Мәсих тураһында бәйән ителгән Һөйөнөслө Хәбәр. Грек телендәге «һөйөнөслө хәбәр» – «эуангелион» беҙгә ғәрәп теле аша «Инжил» формаһында килеп еткән. Шуға күрә Яңы Ғәһедте йыш ҡына Инжил, йәғни Һөйөнөслө Хәбәр тип йөрөтәләр.

Инжил үҙ эсенә 27 әҫәрҙе: дүрт «Һөйөнөслө Хәбәр» китабын, «Илселәрҙең ғәмәлдәре»н, Ғайса Мәсихтең юлынан барыусы шәкерттәрҙең 21 хатын һәм «Асылыш» китабын алған.

Инжилдең тәүге дүрт китабында Ғайса Мәсихтең шәкерттәре Матфей, Марк, Лука һәм Яхъя Ғайсаның ерҙәге тормошо, башҡарған хеҙмәте, өйрәтеүҙәре һәм күрһәткән мөғжизәләре, Үҙен ҡорбан итеп, кешелекте ҡотҡарыу өсөн үлеүе һәм үлгәндән һуң терелеп тороуын бәйән итә.

«Илселәрҙең ғәмәлдәре» китабында иһә кешеләрҙең Ғайса Мәсихкә булған ышаныстарының ни рәүешле бөтә донъяға тарала башлауы тәфсирләнә. Ул илсе итеп ебәргән шәкерттәр, һис ниндәй ауырлыҡтарға, хәүеф-хәтәргә ҡарамайынса, Уның хаҡында шаһитлыҡ ҡылып йөрөгәндәр. Был китап шулай уҡ христианлыҡтың тәүге йылдарын күҙ алдына баҫтырыуы менән дә тарихи ҡиммәткә эйә.

Павел, Петр, Яхъя һәм башҡа илселәрҙең 21 хат-хәбәре лә китапта ҙур урын биләй. Һәр хат имандаштар берҙәмлектәренә йә тәғәйен кешеләргә төбәп яҙылған һәм һәр береһендә мәсихселәрҙең тормошо һүрәтләнә, уларҙың тотҡан имандары тураһында һөйләнелә, Алла хаҡында өйрәтелә, шулай уҡ кәңәштәр һәм нәсихәттәр бирелә.

Һуңғы «Асылыш» китабы йөкмәткеһе буйынса пәйғәмбәрлек итеүгә ҡоролған. Был китап ябай ғына түгел. Унда һәр төрлө образдар бик күп. Улар аша кешелек тарихында Алланың тотҡан урыны асыла, Уның был донъяны хөкөм итеүе һәм урынына «яңы күк һәм яңы ер» тип аталған мәңгелек донъя килеүе хәбәр ителә.

Инжил боронғо грек телендә ике мең йыл тирәһе элек барлыҡҡа килгән һәм уны күп тапҡырҙар ҡулдан күсереп яҙғандар. Шул сәбәпле ҡулъяҙмаларҙың төрлө нөсхәләрендә төрлөсә яҙылған урындар осрай. Әммә уларҙың әһәмиәте әҙ һәм бүтән боронғо яҙмаларға ҡарағанда улар Инжил өсөн күп түгел. Тәржемә өҫтөндә эшләгәндә беҙ мөмкин тиклем иң боронғо һәм абруйлы ҡулъяҙмаларға таянырға тырыштыҡ. Шуға күрә, ҡайһы бер урындар рус телендәге тәржемәләрҙән айырыла. Был урындар төшөрмәләрҙә күрһәтелде.

Китаптың аҙағында тәржемәлә осраған, аңлатып китеү кәрәк булған мөһим һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәргә аңлатма бирелгән һүҙлек индерелде. Шулай уҡ Палестинаның һәм Инжил заманындағы Яҡын Көнсығышта ваҡиғалар булып уҙған ерҙәрҙең карталары бар.

Инжил тәүләп донъя күргән мәленән алып мендән ашыу телгә тәржемә ителгән, хәҙер улар иҫәбенә башҡорт теле лә өҫтәлде. Тәржемә эшендә филология һәм дин белгестәре, яҙыусылар һәм мөхәррирҙәр ихлас ҡатнашты. Китаптарҙың бер өлөшөн, атап әйткәндә Матфей, Марк, Яхъя бәйән иткән «Һөйөнөслө Хәбәр»ҙәрҙе, «Илселәрҙең ғәмәлдәре»н һәм бер нисә хатты билдәле башҡорт яҙыусыһы Әхиәр Хәким тәржемә итте. Йыйынтыҡҡа ингән бүтән әҫәрҙәрҙе тәржемә итеү һәм уларҙы китапҡа әҙерләүҙә шулай уҡ Илгизәр Бураҡаев менән Гөлнара Мостафина ҙур көс һалды.

Изге Яҙманы тәржемә итеү институты тәржемәселәргә, мөхәррирҙәргә, шулай уҡ Инжилде башҡорт телендә донъяға сығарыуҙа ҡатнашҡан барыһына ла оло рәхмәтен белдерә.

*Изге Яҙманы тәржемә итеү институты*

# Һүҙлек

б. э. т. – беҙҙең эраға тиклем
б. э. – беҙҙең эрала
йылдар яҡынса бирелә

**Абба** – арамей телендә «атай» тигәнде аңлата, балаларҙың аталарына иркәләп өндәшеү һүҙе. Ғайса Мәсих Атабыҙ Аллаға шулай мөрәжәғәт иткән. Унын артынан тәүге мәсихселәр ҙә әйтә башлаған.

**Аҙаҡҡы көн, ҡиәмәт көнө** – был донъяның ваҡиғалары тамамланған мәл. Күп йәһүдтәр, ошо көндә элек үлгәндәр терелә һәм бөтә кешеләр ҙә, йәшәлгән ғүмерҙәренә иҫәп-хисап бирер өсөн, Алла хөкөмө алдына баҫа, тип ышанған. Инжил быны иҫбатлай, әммә был хөкөм алдында бер кем дә үҙенең хаҡ эштәре менән аҡлана алмаясағын, ә тик Ғайса Мәсихтең йолоп алыу ҡорбаны аша ҡотоласағын һыҙыҡ өҫтөнә ала.

**Аждаһа** – Изге Яҙмала Иблисте, шаҡшы рухтарҙың башлығын кәүҙәләндерә.

**Аҡланыу, хаҡ һаналыу** – Алла кешенең гонаһтарын кисерә, уны ғәйепһеҙ тип иғлан итә һәм тәҡүә кешегә ҡараған кеүек ҡарай. Инжил быңдай хаҡ һаналыуҙы Ғайса Мәсихкә инаныу аша ғына алырға мөмкин икәнен һыҙыҡ өҫтөнә ала.

**Алла асыуы** – был Алла кешеләрҙеке кеүек үк тойғо кисерә тигәнде аңлатмай. Әммә Ул кешеләрҙең гонаһтарын хупламай, шуға күрә гонаһ артынан ҡаты яза килеүе мөмкин. Был язаның маҡсаты – ғәҙеллек урынлаштырыу һәм гонаһлыларҙың аҡылына килеүгә өлгәшеү. Һәр кем гонаһ ҡыла, бының менән ул үҙенә Алланың асыуын төшөрә. Шулай ҙа Ғайса Мәсих аша Алла менән татыулаша ала.

**Алла Батшалығы** – был һүҙ Алла һәм Уны үҙҙәренең Батшаһы тип ҡабул итеп, Уның менән берҙәм йәшәгән кешеләр араһындағы мөнәсәбәт тураһында. Ул Ғайса Мәсих ергә әйләнеп ҡайтҡандан һуң урынлашасаҡ: Алла халҡының дошмандары

еңеләсәк, элекке донъя, яңыһына юл биреп, юҡҡа сығасаҡ, унда мәңгелек татыулыҡ урынлашасаҡ һәм һәр төрлө яуызлыҡҡа урын ҡалмаясаҡ. Әммә Алла Батшалығы киләсәк эше генә түгел. Ул инде хәҙер, кешеләр иман менән Алла ихтыярына эйәргән һәм бер-береһенә мөхәббәтле мөнәсәбәт булған бөтә ерҙә бар. Алла Батшалығы – Ғайса Мәсих, Сумдырыусы Яхъя һәм илселәрҙең төп вәғәзләү темаһы.

**Алла бәрәсе** – Алла Муса аша израилдәргә биргән ҡанунға ярашлы, һәр иртә һәм кис һайын Алла Йортонда руханиҙар Аллаға ҡорбан итеп йәш бәрәс салған. Ҡорбан бәрәсенең ҡаны Алла менән халыҡты татыулаштырған; йола аша израилдәрҙең гонаһтары йыуылған. Ғайсаны Алла Бәрәсе тип атап, Сумдырыусы Яхъя Уның бөтә донъя өсөн ҡорбанға килтереләсәген алдан әйткән.

**Алла Йорто** – Сөләймән батшаның Иерусалимда быға тиклем йәһүдтәр табынған ғибәҙәтхана урынына төҙөткән изге йорттар теҙмәһе. Б. э. тиклем 586 йылда Сөләймән төҙөткән был Алла Йорто вавилондар тарафынан емерелә, әммә бер нисә тиҫтә йылдан һуң яңынан аяҡҡа баҫтырыла. Аҙаҡ ул үҙгәреш кисерә: Бөйөк Һируд уны күпкә ҙурайта. Алла Йорто Израиль тормошоноң үҙәгенә әйләнә. Ошонда ғына ҡорбан килтерергә мөмкин була, ошонда илдең төрлө төбәктәренән һәм сит илдәрҙән мөһим дини байрамдарҙы үткәрергә йәһүдтәр йыйыла.

Алла Йортоноң төп өлөшө Иң изге урын тип аталған һәм унда, йылына бер тапҡыр махсус хеҙмәт атҡарыр өсөн, иң баш рухани ғына инә алған. Ул Изге урындан ҙур шаршау менән бүленеп торған. Ябай кешеләргә унда инеү мөмкин булмағанлыҡтан, улар Аллаға ихатала табынған. Унда төрлө шөғөл кешеләре йыйылған.

Ғайса Мәсих алдан әйткәнсә, б. э. 70-се йылдарында Йорт римлылар тарафынан тулыһынса емерелгән, әлегә тиклем аяҡҡа баҫтырылмаған.

**Алла Улы** – был һүҙ Ғайса Мәсих һәм Уның күктәге Атаһы араһындағы айырым мөнәсәбәтте һәм нәҡ Ғайсаның Алланы һынландырыуын, Уны кешеләргә асыуын белдерә. Унан тыш, бөтә иман тотоусылар ниндәйҙер кимәлдә Алла балалары тип атала ала, сөнки улар Алланы үҙҙәренең Атаһы итеп ҡабул итә, Уны яраталар һәм Уның ихтыярын үтәргә тырышалар.

**Аллала** – был һүҙ хаҡ иманлының ғүмер миҙгеленең һәр мәлен Алла тураһында иҫләп, Уның ихтыяры буйынса ғәмәл ҡылып һәм Уға доға менән мөрәжәғәт итеп үткәреүен күҙ уңында тота. Иманлы кеше «Аллала», йәғни Алла менән берҙәм була алыуға Ғайса Мәсихкә инаныу аша өлгәшә.

**Алланы танып белеү** – был әйтем «Алла тураһында ниндәйҙер мәғлүмәткә эйә булыу» тигәнгә ҡарағанда «Уның ихтыяры буйынса, Уның менән килешеп йәшәү»ҙе аңлата.

**Амин** – боронғо йәһүд телендә «хәҡиҡәт», «хәҡиҡи» тигәнде аңлата. Доға йә вәғәз башлыса ошо һүҙ менән башланырға йә тамамланырға мөмкин. «Амин» тип яуап ҡайтарыу һиңә әйтелгән һүҙҙәр менән тулыһынса килешеүҙе белдерә.

**Арамей теле** – боронғо йәһүд һәм бер ни тиклем кимәлдә ғәрәп телдәренә ҡәрҙәш тел. Ошо телдә Иҫке Ғәһедтең Данил китабындағы бер нисә бүлек яҙылған. Ғайса Мәсих йәшәгән осорҙа Палестинала йәһүдтәрҙең төп һөйләшеү теле ошо була.

**Арҡысаҡ (гр. *ставрос*, рус. *крест*)** – Рим империяһында, Ғайса Мәсих йәшәгән осорҙа, иң ауыр енәйәт ҡылған кешеләрҙе язалап үлтереү өсөн файҙаланылған ҡулайлама. Ул ергә ҡағылған бағананан һәм уға арҡыры ҡағылған һайғауҙан торған. Арҡысаҡҡа ҡаҙаҡланырға хөкөм ителгән кешеләр бик оҙаҡ, ыҙаланып тороп үлгән. Бындай яза иң ҡатыһы һәм хурлыҡлыһы һаналған. Ғайса арҡысаҡҡа ҡаҙаҡланғандан һуң, киреһенсә, был язалау ҡоралы Уның аша ҡотолоу һәм тормош алыу билдәһе булып һанала башлаған.

**Асия өлкәһе** – (с хәрефе аша яҙыла) Рим провинцияһы, хәҙерге Бәләкәй Азияның (Төркиә) бер өлөшө. Баш ҡалаһы Эфес булған.

**Асылыш** – Алла кешеләргә Үҙенең ихтыярын төрлө юлдар менән аса: күктән тауыш биреү, фәрештәләр, пәйғәмбәрҙәр, илаһи күренмеш, Изге Яҙма аша. Уның ихтыярын асып биргән бөтә был ысулдарҙы «асылыш» тип атарға мөмкин. Алланың кешеләргә булған иң мөһим Асылышы – ул Ғайса Мәсих.

**Берҙәмлек етәксеһе** – грексанан «һаҡсы, күҙәтеүсе» – тәүге мәсихсе имандаштар берҙәмлеге өлкәне менән бер булған.

**Берҙәмлек өлкәне** – элек имандаштар берҙәмлегендә рухи етәксе эшен башҡарыусыны «өлкән» тип атағандар. Йыш ҡына берҙәмлек эсендә бер нисә өлкән булған. Илселәр, рухи хеҙмәткә бағышлағанда, өлкәндәргә доға ҡылып ҡулдарын ҡуйған, уңышлы хеҙмәт итеүҙәрен теләп уларға Изге Рухтың мәрхәмәтен тапшырған.

**Вавилон** – боронғо Яҡын Көнсығыштағы Йылғараһында (хәҙерге Ираҡ) урынлашҡан иң ҙур ҡала, бөйөк Вавилон империяһының баш ҡалаһы. Вавилонда күп төрлө илаһтарға табынғандар. Улар б. э. тиклем 587 йылда Иерусалимды ҡыйрата. Шунан һуң йәһүдтәрҙең байтаҡ өлөшөн үҙҙәре менән Йылғараһына алып китәләр. Инжил дәүеренә Вавилон емерелгән була инде. Инжилдә «Вавилон» һүҙе Иблис батшалығы тигәнде аңлата; күрәһең, уның менән Римды – Иерусалимды яулап алған, мәжүсиҙәрҙең табыныу культтары һәм күп боҙоҡлоҡтар үҙәге булған яңы бөйөк империяның баш ҡалаһы менән бәйләйҙәр.

**Ваҡыт** – боронғо йәһүдтәр, тәүлек ҡояш байығас башлана, тип иҫәпләгән. Әммә көн яҡтылығын улар ҡояш ҡалҡҡан мәлдән ун ике сәғәткә бүлеп ҡараған. Шуға ярашлы, әгәр ҡояш беҙҙең һанап сығарыу буйынса сәғәт алтыла ҡалҡһа, сәғәт өс яҡынса иртәнге туғыҙға, алты – ун икегә, туғыҙ – көндөҙгө сәғәт өскә тура килә. Төндө ғәҙәттә өсәр сәғәттән торған дүрт өлөшкә бүлгәндәр.

**Галилея** – Палестинаның төньяҡ өлөшө. Быуаттар һуҙымында был өлкә ситтәр хакимлығы аҫтында ҡала килә, шуға күрә халҡы араһында йәһүд булмағандар күп була. Йәһүҙи халҡы йыш ҡына уларға һауалы ҡарай. Галилеяның Назара ҡалаһында Ғайсаның бала һәм үҫмер сағы үтә. Ошонда, Галилеяла, Ул күп төрлө мөғжизәләрен ҡыла.

**Гонаһ** – Алла тарафынан билдәләнгән ҡанун талаптарын боҙоу, тыңлашмау һәм Аллаға буйһонмау.

**Ғайса Мәсихтә, Раббыла** – грексанан һүҙмә-һүҙ алынған был һүҙ Ғайса Мәсихкә инанып, Уның менән тығыҙ бәйләнештә булыуҙы күрһәтә һәм тәржемәлә «Ғайса Мәсих/Раббы аша», «Ғайса Мәсихтеке/Раббыныҡы булыу», «Раббы менән тығыҙ бәйләнештә булыу», «Ғайса Мәсих менән берлектә булыу» тигән һүҙҙәр менән дә бирелә.

**Ғибәҙәтхана** (гр. һәм рус. *Псалтирь*) – йәһүдтәрҙең бергәләп доға ҡылыу, Изге Яҙманы уҡыу һәм дини йолаларҙы өйрәнергә йыйылыу урыны. Шундай йыйылыштар үткән өй ҙә шулай аталған. Йыйылыш мәлендә ғибәҙәтханала хатта ябай ҡатнашыусы ла Изге Яҙманан өҙөк уҡып, йыйылған халыҡҡа уны аңлата алған. Алла Йортонан айырмалы рәүештә, ғибәҙәтханаларҙа ҡорбан килтерелмәгән. Йәһүдтәр йәшәгән һәр ҡалала бер булһа ла ғибәҙәтхана булған.

**Данил** – Иҫке Ғәһедтәге пәйғәмбәрҙәрҙең береһе. Данил китабында заман ахыры тураһында күп һөйләнелә: яуызлыҡ көстәре Аллаға тоғро кешеләргә ҡаршы асыҡ яуға сығасаҡ һәм улар унда Алла тарафынан еңеләсәк. Был китап пәйғәмбәрлек әһәмиәтенә эйә серле образдар менән тулы.

**Дауыт** – Саулдан һуң икенсе һәм иң күренекле Израиль батшаһы, тәхеткә б. э. тиклем мең йыл тирәһе элек ултыра. Дауыт Израилде бөйөк дәүләткә әүерелдерә, ә Иерусалимды уның баш ҡалаһы яһай. Ул шулай уҡ оҫта һуғышсы һәм бөйөк шағир, Иҫке Ғәһедтәге Аллаға мөрәжәғәт ителгән йырҙар – Зәбур китабы авторҙарының береһе. Дауыт Аллаға тоғро хеҙмәт итә. Бының өсөн Алла уға уның нәҫеле генә Израилдең батшалары буласаҡ тип вәғәҙә бирә. Йәһүд пәйғәмбәрҙәре бөтә донъя менән ғәҙел идара итәсәк Ғайса Мәсихте Дауыт тоҡомонан буласаҡ тип алдан әйткән. Шуға күрә Ғайсаны Дауыт Улы (Дауыт тоҡомо) тип тә атайҙар.

**Дауыт Улы** – йәғни туранан-тура Дауыт батшаның тоҡомо. Шулай тип еврейҙәр үҙҙәре көткән Мәсихте атай, сөнки улар Мәсихтең Дауыт батшаның туранан-тура тоҡомо булыуына ышанған.

**Динар** – римлыларҙың көмөш аҡсаһы. Ялланып эшләгән эшсенең бер көнлөк эш хаҡы.

**Доға ҡылыу** – Инжил доғаның ике төрөн белә: шәхси – кеше Аллаға үҙ һүҙҙәре менән мөрәжәғәт итә, Уны данлай, рәхмәтен белдерә йә ярҙам һорай. Икенсеһе – тейешле урында (Алла Йортонда йә ғибәҙәтханала) һәм тейешле ваҡытта билдәле бер өлгө буйынса берҙәм ҡылынған доға.

**Еврейҙәр** – Яҡубтан барлыҡҡа килгән халыҡ. Был халыҡ – Израиль, ә кешеләре израилдәр һәм еврейҙәр тип аталған. Ҡайһы берҙә «еврей» һүҙе «йәһүд»тең синонимы булараҡ ҡулланыла. Шулай ҙа «еврей» нығыраҡ этник, ә «йәһүд» дини төркөмгә ҡарай.

**Зәбур** (гр. һәм рус. *синагога*) – 150 дини еврей йыры Иҫке Ғәһедтең айырым китабына – Зәбурға тупланған. Был китапты Дауыт батшаның исеме менән бәйләйҙәр, сөнки ул ҡайһы бер йырҙарын шәхсән үҙе яҙған. Уларҙың ҡайһылары Алланы мәрхәмәте өсөн данлай һәм рәхмәт белдерә, бүтән йырҙары ярҙам һорап үтенә. Электән иманлылар доға ҡылған ваҡытта төрлө Зәбур йырҙарын йырлайҙар.

**Зәйтүн тауы** – Иерусалимдың көнсығыш стенаһы янындағы бейек булмаған тау. Унан бөтә ҡала күренеп торған. Тау итәгендә Гефсимания баҡсаһы урынлашҡан. Нәҡ ошонда Инжилдә бәйән ителгән хәл-ваҡиғалар булып уҙған, әйтәйек, Ғайса Мәсих ошонда ахырызаман тураһында һөйләй һәм ошонда уҡ ҡулға алына.

**Иблис** – грек теленән «хәйләкәр, алдаҡсы» тип тәржемә ителә. Шаҡшы рухтарҙың башлығы һәм Алланың дошманы. Изге Яҙмалағы бүтән исемдәре – шайтан, Веельзевул. Асылыш китабында уның бер ваҡыт тулыһынса еңеләсәге һәм юҡҡа сығарыласағы тураһында һөйләнелә.

**Ибраһим** – беренсе патриарх. Уның тураһында Изге Яҙмала Иҫке Ғәһед китабының Башланмыш өлөшөндә, 12-25-се бүлектәрҙә бәйән ителә. Алла Ибраһимды һайлап алып, уның менән килешеү төҙөй, уға тыуған еренән китеп алыҫтағы Ханаанға күсеп ултырырға бойора. Ул ерҙе Алла Ибраһимдың күп һанлы тоҡомона бирергә вәғәҙә иткән була. Уға ҡатыны Сара менән улдары Исхаҡтың тыуыуын оҙаҡ көтөргә, төрлө һынауҙар аша үтергә тура килә. Шулай Ибраһим израилдәрҙең һәм ҡайһы бер бүтән халыҡтарҙың ата-бабаһы булып китә. Изге Яҙмала ул – Аллаға бер һүҙһеҙ тоғро булыу, Уның барлыҡ бойороҡтарын килеп тыуған хәлдәргә һәм кешелектең нимәгә иҫәп тотоуына ҡарамай үтәргә әҙерлек өлгөһө.

**Изге** – Изге Яҙмала был һүҙ тәүҙә Алланы һыҙатландыра. Шулай уҡ Алла өсөн айырымланған бөтә нәмә: Алла Йорто, ғибәҙәт ҡылыу әйберҙәре һәм Үҙенә табынған кешеләр (Иҫке Ғәһедтә – Израиль халҡы, Инжилдә – имандаштар берҙәмлеге). Унан тыш, был һүҙ шәхси таҙалыҡтың һәм рухи камиллыҡтың юғары кимәлен белдерергә мөмкин.

**Изге Рух** – Алла Рухы. Уға, Ата менән Улға хас булған кеүек, Алла сифаттары хас. Инжилдән күренеүенсә, Ғайса Мәсихкә инаныусылар Изге Рухты ҡабул итә. Нәҡ Ул уларға нәсихәт һәм көс бирә.

**Изге Яҙма** (йәки Изге Китап, гр. һәм рус. *Библия*) – Инжилдә Иҫке Ғәһед шулай аталған. Ваҡыт үтеү менән, Инжил яҙылып донъя күргәс, уны ла «Яҙма» аңлатмаһына индергәндәр.

**Израиль** – «Яҡуб»ты һәм «Еврейҙар»ҙы ҡарағыҙ.

**Илсе** (гр. һәм рус. *апостол*) – боронғо грек телендәге был «апостолос» һүҙе «илсе, хәбәрсе» тигәнде аңлата. Инжилдә-

ге мәғәнәһе – Ғайса Мәсихтең һайлап алған һәм Һөйөнөслө Хәбәрҙе вәғәзләргә ебәргән илсеһе. Был исем кешегә ҙур яуаплылыҡ һалған, шулай уҡ бик абруйлы һаналған: Ғайса Мәсих күк Батшаһы булһа, илсе – Уның ерҙәге тулы хоҡуҡлы вәкиле. Тәү сиратта Уның менән һәр ваҡыт бергә йөрөгән иң яҡын ун ике шәкерте шулай йөрөтөлә. Аҙаҡ Павел да үҙен илсе тип атай башлай, әммә ул әлеге хеҙмәткә Мәсих үлеп терелгәндән һуң ғына саҡырылған була. Был исем менән Һөйөнөслө Хәбәрҙе вәғәзләгән бүтән шәкерттәрҙе лә, әйтәйек, Варнаваны атауҙары мөмкин.

**Ильяс** – Израилдең бөйөк пәйғәмбәре. Изге Яҙмала уның нисек итеп тере килеш күккә алыныуы һүрәтләнә, шуға күрә йәһүдтәр берәй заман уның ергә ҡайтырына ышанған. Сумдырыусы Яхъя кешеләргә Ғайса Мәсихтең килерен иғлан итер өсөн «Ильястың рухы һәм ҡөҙрәтендә» килә.

**Иман** – Аллаға, Уның биргән вәғәҙәләренең тормошҡа ашыуына ышаныс, Уның ихтыярын ҡабул итеп, көндәлек тормошта уға эйәрергә әҙер булыу. Инжилдә имандың иң мөһим өлөшө – Ғайса Мәсихте Раббы һәм Ҡотҡарыусы итеп ҡабул итеү.

**Имандаштар** – грек телендә һүҙмә-һүҙ «туғандар». Иманлылар йыш ҡына Атаның бер – Алла ғына икәнен һыҙыҡ өҫтөнә алып, бер-береһен имандаш тип атай. Улар бер ғаилә булып, бер-береһенә таянып йәшәргә тырыша.

**Имандаштар берҙәмлеге** – бер тирәлә йәшәп, Аллаға табыныу, Изге Яҙманы өйрәнеү һәм аралашыу өсөн даими рәүештә йыйылып торған иманлылар йәмғиәте. Был һүҙ урындағы берҙәмлеккә генә түгел, Ғайса Мәсихкә ысын күңелдән инанған донъялағы барлыҡ кешеләргә лә ҡағыла.

**Инжил** – боронғо грек телендә был һүҙ «Һөйөнөслө Хәбәр» тигәнде аңлата. Йәғни Ҡотҡарыусы Ғайса Мәсих тураһындағы хәбәр. Бында Уның тыуыуы, хеҙмәт итеүе, өйрәтеүҙәре, үлеүе һәм терелеүе күҙ уңында тотола. Һуңғараҡ Уның тураһында бәйән ителгән дүрт китап, аҙаҡ бөтә йыйынтыҡ шулай атала башлай.

**Иң баш рухани** – иң төп йәһүд руханийы. Был хеҙмәтте ваҡытына ҡарап бер генә рухани башҡарған. Ҡанунға ярашлы, ҡайһы бер йолаларҙы ул ғына атҡарған, атап әйткәндә, Алла Йортоноң Иң изге урынына инә алған.

**Иремия** – беҙҙең эраға тиклем VII-VI быуаттарҙа йәшәгән пәйғәмбәр. Унын пәйғәмбәрлегенең төп темаһы – Израилде тәүбәгә килергә саҡырыу, юғиһә уны әсе яҙмыш көтөүен аңлатыу.

**Исав** – Исхаҡтың улы, Яҡубтың игеҙәге. Бер ваҡыт, ныҡ асыҡҡас, Исав беренсе ул булыу хоҡуғын ҡустыһына шыйыҡ ашҡа һата. Шунан һуң Яҡуб беренсе ул булып һанала башлай.

**Исем** – ҡушылған исем ул ваҡыттарҙа кешенең асылын аңлатып торған. Әгәр шәкерттәр нимәнелер «Ғайса Мәсихтең исеменән» эшләһә, быны Унын ихтыяры һәм ҡөҙрәте менән башҡарған.

**Исхаҡ** – Ибраһим менән Сараның улы, Исав менән Яҡубтың атаһы, еврейҙарҙың ата-бабаһы.

**Иҫке килешеү, беренсе килешеү, Иҫке Ғәһед** – Израиль халҡы Мысырҙан сыҡҡас, Алла Синай тауында улар менән килешеү төҙөй. Килешеүҙең иң мөһим өлөшө – ҡанун. Ул Инжилдә «иҫке килешеү» йә «беренсе килешеү» тип атала. Был һүҙҙәрҙең синонимы булған «Иҫке Ғәһед» китаптар йыйынтығына ҡарата ҡулланыла. Иҫке Ғәһедтә ошо килешеү хаҡында һәм израилдәрҙең унын талаптарын нисек тотоуҙары бәйән ителә. Йыйынтыҡ төрлө кешеләр тарафынан быуаттар һуҙымында яҙылған, Инжил менән икеһе бергә Изге Яҙманы тәшкил итә.

**Ишағыя** – б. э. тиклем VIII быуатта йәшәгән Иҫке Ғәһедтәге иң билдәле пәйғәмбәр. Ғайса Мәсихтең тормошонда булып уҙасаҡ ваҡиғалар тураһында Ул тыуғанға тиклем 700 йыл элек үк һөйләп ҡалдырған.

**Йолоп алыу** – аҡса түләнгәндән һуң берәүҙең йә тотош халыҡтың ҡоллоҡтан йә тотҡонлоҡтан азат ителеүе. Ғайса Мәсихтең Үҙен үлеме менән ҡорбанға килтереүе Үҙенә инанған кешеләрҙе гонаһ ҡоллоғонан һәм үлемдән мәңгегә ҡотолдорған.

**Йософ** – 1. Яҡубтың ун ике улының береһе. Унан Израиль халҡының ике быуыны таралған: Ефрем һәм Манассия (Башланмыш китабының 37-41-се аяттарын ҡарағыҙ). Һуңғараҡ был исем башҡа күп кешеләргә ҡушыла башлаған. 2. Ғайсаны тыуҙырған Мәрйәмдең ире. Ул ваҡыттағы йолаларға ярашлы, йәһүдтәр уны Ғайсаның атаһы тип һанай. 3. Аримафейҙан Йософ – Ғайсаға инанған хәлле кеше, Юғары кәңәшмә ағзаһы. Ғайса арҡысаҡҡа ҡаҙаҡланғандан һуң, тәнен нәҡ ул ерләй ҙә инде.

**Йәһүдтәр** – иң тәүҙә был һүҙ менән Йәһүҙә быуынына (Яҡубтың улдарының береһенең нәҫеле) ҡараған кешеләр аталған. Әм-

мә Инжил мәленә бөтә еврейҙарҙы шулай йөрөтә башлайҙар. Яхъя бәйән иткән Һөйөнөслө Хәбәрҙә «йәһүдтәр» һүҙе менән йыш ҡына йәһд халҡының башлыҡтары атала. «Еврейҙар»ҙы ҡарағыҙ.

**Йәһүҙә** – Яҡубтың ун ике улының береһе, израилдәрҙең бер быуыны унан башланғыс алған һәм нәҫеле уның исеме менән йәһүдтәр тип йөрөтөлә башлай (Инжилдә был һүҙ менән ғөмүмән бөтә еврейҙарҙы атайҙар). Улар күсеп ултырған Израиль иленең өлкәһен Йәһүҙиә тип атайҙар. Йәһүҙәнең быуыны – Израилдең бөйөк батшаһы Дауыт һәм Уның нәҫеленә ҡараған Ғайса Мәсих. Улар икеһе лә Вифлеем ҡалаһында тыуған. Аҙаҡ был исемде күп кенә башҡа кешеләр ҙә йөрөткән, әйтәйек, Йәһүҙә Искариот – Ғайса Мәсихкә хыянат иткән шәкерт.

**Килешеү** – Алла менән кешеләр араһында төҙөлгән был тантаналы килешеү Изге Яҙмала төп урынды биләй. Алла Муса пәйғәмбәр аша бөтә еврей халҡы менән килешеүҙе Синай тауында төҙөй. Һәр яҡ, иңенә анығ бурыстар алып, вәғәҙәләр бирешә. Алла еврейҙарҙы фатихаларға һәм уларҙы барлыҡ дошмандарынан ҡурсаларға һүҙ бирә. Тегеләре үҙ сиратында Аллаға тоғролоҡ һаҡларға, Уның ҡанунда күрһәтелгән ихтыярын үтәргә тейеш була. Пәйғәмбәрҙәр, Алла менән кешеләр араһында яңы килешеү төҙөләсәк, тип алдан әйткән булған. Һөйөнөслө Хәбәрҙә уның Ғайса Мәсихтең үлеп терелеүе аша төҙөлөүе бәйән ителә. Килешеү тураһында Инжилдә һөйләнелә. Хәҙер Алла халҡы, сығышы буйынса кем булыуына ҡарамаҫтан, Ғайса Мәсихкә инанған һәм Уның өйрәтеүҙәре буйынса йәшәүселәр.

**Килешеү һандығы** – Израилдәрҙең иң изге нәмәһе: ағастан эшләнеп, алтын менән ялатылған изге һандыҡ. Унда Алла еврей халҡы менән килешеү төҙөгәс, Синай тауында Мусаға биргән 10 әмер яҙылған таштаҡта ятҡан. Һандыҡ тәүҙә шаһитлыҡ сатырының иң изге яғында, аҙаҡ Алла Йортонда ултырған. Израилдәр уны символик рәүештә Раббы ултырған батша тәхете тип ҡабул итә.

**Күктәр Батшалығы** – «Алла Батшалығы»н ҡарағыҙ.

**Ҡабил** – Әҙәм менән Һауаның өлкән улы, Һабилдың ағаһы. Алла Һабил килтергән ҡорбанды ҡабул итеп, Ҡабилдыҡын кире ҡаҡҡас, Ҡабил көнсөллөктән ҡустыһын үлтерә. Был кешелек тарихындағы беренсе үлтереү була. Алла Ҡабилды

ҡарғай һәм уны ғүмеренең сигенә тиклем ил буйлап күсенеп йөрөргә дусар итә.

**Ҡанатлы заттар** – Аллаға айырыуса яҡын булған күк заттары (русса – «херувимы»). Еврейҙар уларҙы Алла ултырған ике тәгәрмәсле арбаны һөйрәп барған иҫ киткес ҙур ҡанатлы хайуандар итеп күҙ алдына килтергән. Шуға күрә ҡанатлы заттар Алланың тәхетен сағылдырған израилдәрҙең төп изге урыны – килешеү һандығының ҡапҡасына төшөрөлгән булған.

**Ҡанун** – Израиль халҡына Муса пәйғәмбәр аша бирелгән Алла ҡануны. Ошо ҡанун һәм уның бирелеү тарихы тупланған Изге Яҙманың тәүге биш китабын да шулай атайҙар. Ҡанун израилдәргә уларҙың дини һәм ижтимағи тормошон тәртипкә һалыу буйынса күрһәтмәләр бирә, яҡшылыҡ, ғәҙеллектең юғары өлгөләрен булдыра. Ҡанунда кешеләргә Алла ихтыяры асыла, әммә ҡанун үҙенән-үҙе кешеләрҙе ҡотҡара алмай. Сөнки улар әленән-әле гонаһ ҡылып, ҡанунды боҙоп тора. Шуға күрә Инжилдә ҡанун мәрхәмәткә ҡаршы ҡуйыла.

**Ҡанун белгесе** – Муса ҡануны буйынса белгес. Ул ҡанунды күсереп яҙыу, өйрәнеү, халыҡҡа аңлатыу һәм уны ҡулланыу менән шөғөлләнгән, шулай уҡ халыҡты өйрәткән. Ундай кешеләр йәһүд йәмғиәтендә ихтирам менән ҡулланған һәм ярайһы ғына хакимлыҡҡа эйә булған.

**Ҡорбан килтереү** – израилдәр, Муса ҡануны буйынса, Аллаға ҡорбан итеп хайуан салған. Уның бер өлөшөн йә тотош килеш ҡорбан килтереү урынында яндырғандар, ә ҡалғанынан (әгәр ҡалһа) кешеләр аҙыҡ әҙерләй алған. Алла Муса дәүеренән башлап ҡорбандың бер урында ғына килтерелеүен талап иткән: тәүҙә ғибәҙәт ҡылыу сатыры алдында, аҙаҡ Алла Йортонда, һәм уны тик руханиҙар ғына башҡара алған. Хайуандан тыш икмәк, шарап, зәйтүн майы, яңы уңыштың беренсе емештәрен ҡорбан итеп килтергәндәр. Бындай әллә нисә төр ҡорбандың һәр береһе айырым әһәмиәткә эйә булған. Ҡорбанды ҡылынған гонаһтан йолонор өсөн, Алланың рәхимлелегенә хөрмәт йөҙөнән, әйтелгән нәҙер йә үҙ теләктәре буйынса килтергәндәр. Унан тыш, руханиҙар һәм левиттар израилдәр Аллаға ҡорбанға килтергән аҙыҡтарҙан өлөш алған. Инжилдә Ғайса Мәсихтең арҡысаҡтағы үлеме тотош кешелектең гонаһтары өсөн килтерелгән ҡорбан итеп һүрәтләнә.

**Ҡорбан килтереү урыны** – ҡорбанға килтерелгән хайуандарҙы йә уларҙың ағзаларын яндыра торған күтәренке урын. Ҡорбан килтереү урынын ғәҙәттә таштарҙан төҙөгәндәр, ләкин ғибәҙәт ҡылыу сатыры янындағыһы күсереп йөрөтмәле, металл менән көпләнгән ағастан эшләнгән. Тимерҙән ҙур булмаған махсус төтәҫләү урындары ла булған, унда хуш еҫле үләндәр төтәткәндәр.

**Ҡотҡарылыу байрамы** – йәһүдтәрҙең мөһим байрамдарының береһе. Уны, ҡасандыр еврейҙарҙың Мысыр ҡоллоғонан ҡотолоуын хәтергә алып, яҙғыһын билдәләйҙәр. Борон еврейҙар был байрам көнөндә Аллаға табыныу өсөн Израилдән Иерусалимға килгән. Ҡотҡарылыу байрамы артынан уҡ ете көнгә һуҙылған Сөсө күмәс байрамы башланған. Бер аҙна буйына еврейҙар сөсө икмәк кенә ашаған. Инжилдә был ике байрам берҙәм байрам булып һанала. Нәҡ ошо көндәрҙә Ғайса Мәсих арҡысаҡҡа ҡаҙаҡланған һәм үленән терелгән. Ошонан һуң Ҡотҡарылыу мәсихселәрҙең мөһим байрамы – Мәсихтең терелеү байрамы (русса – Пасха) булып китә.

**Ҡотҡарыусы** – Ғайса Мәсихтең арҡысаҡтағы үлеме һәм терелеүеһаша кешеләргә гонаһ хакимлығынан ҡотолорға, Алла менән аралашырға һәм мәңгелек тормош алырға мөмкинлек асылған. Кеше был ҡотолоуға Ғайса Мәсихкә булған иман аша өлгәшә. Шуға күрә Инжилдә Ғайса Мәсих Ҡотҡарыусы тип атала.

**Ҡотолоу** – Изге Яҙмала был һүҙ йыш ҡына Алланың кешегә йә тотош халыҡҡа дошмандарынан һәм хәүеф-хәтәрҙән ҡотолорға ярҙам итеүен аңлата. Әммә юғары кимәлдә ҡотолоу иманлы кешеләрҙең мәңгелеккә гонаһ хакимлығынан арыныуын, Алла менән аралаша алыу мөмкинлегенә эйә булыуын һәм мәңгелек тормош алыуын күрһәтә. Был мөмкинлек Ғайса Мәсихтең арҡысаҡтағы үлеме һәм терелеүе аша асыла һәм кеше ҡотолоуҙы Мәсихкә булған иман аша ҡабул итә.

**Ҡулдарҙы ҡуйыу** – дини йола: берҙәмлек башлығы кешенең башына ҡулдарын ҡуйған һәм Алланан айырым бер фатиха һорап доға ҡылған. Шулай Алланан был кешегә Изге Рух бүләк итеүен, ауырыуҙарҙан һауыҡтырыуын йәки үҙенә бер башҡа рухи һәләттәр менән бүләкләүен һораған. Шул рәүешле уны мөһим бер хеҙмәткә ҡуя алғандар.

**Левий** – Яҡубтың ун ике улының береһе, Израиль халҡының бер быуынының ата-бабаһы. Алла әмере буйынса, Левий

быуынынан сыҡҡан Һарун нәҫеле кешеләре генә Алла Йортонда рухани булып хеҙмәт иткән, ҡалған ирҙәр руханиҙарға ярҙам иткән левиттар булған.

**Левит** – Левий быуыны ирҙәренең бер өлөшө (Һарун нәҫеле) руханиҙар булып киткән, ҡалғандары (ғәҙәттә уларҙы левиттар тип атайҙар) ғибәҙәт ҡылыу ваҡытында руханиҙарға ярҙам итеп йөрөгән. Бүтән быуындарға ҡараған еврейҙарҙың бындай хоҡуғы булмаған. Унан тыш, левиттар ҡанунды өйрәнеп, халыҡ араһында өйрәтеүсе булараҡ сығыш яһаған.

**Лот** – Ибраһимдың ағаһының улы. Тәүҙә Ибраһим менән ил буйлап бергә йөрөгән, аҙаҡ аҙғынлығы менән дан алған Содом ҡалаһында урынлашҡан. Алла был ҡаланы юҡ итергә уйлағас, фәрештәһе аша был турала Лотҡа хәбәр еткерә. Фәрештә Лотҡа ғаиләһе менән Содомдан ҡасырға, әммә шул ваҡытта арттарына әйләнеп ҡарамаҫҡа ҡуша. Улар Содом яндырылғанға тиклем ҡасып китә, ләкин ҡатыны фәрештәне тыңламай, артына әйләнеп ҡарай һәм тоҙло бағанаға әйләнә.

**Май һөртөү** – кешенең башына еҫле май ҡойолған йә һөртөлгән булыу. Был йола Алла тарафынан ниндәйҙер айырыуса әһәмиәтле хеҙмәткә: батша йә рухани булыу, ҡайһы бер осраҡтарҙа пәйғәмбәр итеп һайлап алыныу билдәһе булып торған. Ситләтелгән мәғәнәһендә «һайлап алыныу» һәм «Аллаға хеҙмәт итергә фатиха бирелеү» тигәнде аңлата, һәр иман тотоусы, имандаштар берҙәмлегенә ҡушылып, Алланан шундай майлау ҡабул итә.

**Махау сире** – Изге Яҙмала һәр төрлө тире ауырыуы шулай атала. Иҫке Ғәһед талаптарына ярашлы, махау сирлеләр пак булмаған. Уларҙы йәмғиәттән ҡыуғандар, ауырыуынан тулыһынса һауыҡҡан һәм быға рухани шаһит булған осраҡта ғына кире ҡабул иткәндәр.

**Мөхәббәт, яратыу** – Инжилдә мөхәббәт – иң тәүҙә яратҡан кешең өсөн бөтөн нәмәне, хатта үҙеңде ҡорбан итергә әҙерлек. Алланың кешеләргә булған юғары мөхәббәте – Ғайсаның арҡысаҡта Үҙен ҡорбанлы үлемгә килтереүе.

**Муса** – Израилдең бөйөк пәйғәмбәре. Ул Алла халыҡты Мысырҙан сығарған мәлдә лә, аҙаҡ сүллек буйлап гиҙгәнендә лә Израиль халҡының башында тора. Алла Мусаға ҡанун бирә һәм уны еврейҙар үтәргә тейеш була. Был ҡанун Изге Яҙманың тәүге биш китабында бирелгән. Йәһүдтәр өсөн Муса һәр ваҡыт бөйөк иман уҡытыусыһы булып ҡала.

**Мысыр** – Палестинаның көньяҡ-көнсығышындағы ил, унда боронғо еврейҙәр дүрт йөҙ йыл үткәргән. Мысырҙар ыҙалата башлағас, Раббы уларҙы ирекке алып сыға.

**Мәжүси** – боронғо еврейҙәр бөтә башҡа халыҡтарҙы шулай атаған, сөнки ул ваҡытта еврейҙәр ғына Берҙән-бер Аллаға табынған, ә бүтән халыҡтар күп төрлө аллаларға инанған.

**Мәңгелек тормош** – һүҙ ерҙә мәңге тереклек итеүҙе түгел, ә яңы донъяла Алла менән бергә матур һәм хәсрәтһеҙ йәшәүҙе аңлата. Иманлылар өсөн бындай тормош уларҙың үлеменә тиклем үк башлана, әммә Алла иманлы ғүмер иткән кешеләргә мәңгелек тормошто был донъяла көндәре бөткәс кенә тулыһынса бүләккә бирәсәк.

**Мәрйәм** – 1. Ғайсаның әсәһе. Йософ менән йәрәшелгән йәш кенә ҡыҙ килеш Ябраил фәрештә аша Ғайса исемле ул тыуҙырасағы тураһында хәбәр ала. Йософ уны хыянатта (уның өсөн үлем язаһы тейеш булған) ғәйепләү момкинлеген белә тороп, икеләнеп тә тормайынса Алла ихтыярын ҡабул итә. Ғайсаның ғүмеренең һуңғы минутына тиклем Уның янында ҡала, үлгән ваҡытында ла арҡысаҡ янында була. 2. Вифанияла йәшәгән Мәрйәм. Марфаның һәм Ғайса терелткән Лазарҙың һеңлеһе. 3. Магдала ҡалаһында йәшәгән ҡатын. Ғайса уның эсенән ете енде ҡыуып сығарғас, ул Ғайса артынан эйәрә.

**Мәрхәмәт** – мөһим терминдарҙың береһе. Алла мәрхәмәтте кешегә уның ниндәйҙер хеҙмәттәре өсөн әжер итеп түгел, ә Үҙенең изге ихтыяры менән бүләк итеп бирә. Мәрхәмәттең ҡанундан айырмаһы бына ошонда. Ҡанун иһә Алла менән кешеләр араһындағы мөнәсәбәтте көйләй, шулай уҡ, ғәҙеллек принцибынан сығып, кешеләр араһын яйлай, йәғни һәр кем үҙенә тейешле әжерҙе ала. Мәрхәмәт төшөнсәһе бер кешенең йә төркөмдәрҙең тормошондағы төрлө бүләктәргә һәм ваҡиғаларға ҡарата ҡулланылырға мөмкин. Иң юғары мәрхәмәт – иманлыларға асылған Алла менән мәңгелек тормош.

**Мәсих** (йәһ. *Машиах*, гр. *Христос*, рус. *Помазанник*) – һүҙмә-һүҙ «май һөртөлгән» тигәнде аңлата (Боронғо Израилдә хеҙмәткә килгән руханиҙар, пәйғәмбәрҙәр һәм батшалар, йәғни хеҙмәткә Алла Үҙе һайлап алған кешеләр зәйтүн майы менән майланыр булған). Алла пәйғәмбәрҙәр аша еврейҙәргә ер йөҙөнә Израиль халҡын ҡотҡарасаҡ һәм ерҙәге халыҡтар өҫтөнән мәңге хакимлыҡ итәсәк Мәсихте

ебәрергә вәғәҙә бирә. Ғайса дәүерендә еврейҙар вәғәҙә ителгән Ҡотҡарыусының килерен тулҡынланыу менән көтә. Ул уларҙы бүтән халыҡтарҙың хакимлығынан – римлыларарҙан ҡотҡарыр һәм Израилдең элекке бөйөклөгөн тергеҙер тип өмөтләнәләр. Әммә ергә килгән Ҡотҡарыусы – Ғайса Мәсих күберәкте эшләй. Ул тотош кешелекте гонаһ һәм үлем ҡоллоғонан ҡотолдора, Уның аша Алла менән кешеләр яңы, мәңгелек килешеү төҙөй.

**Мәсих дошманы** – русса «антихрист». Ул – яуызлыҡтың кәүҙәләнеше. Ергә Мәсихкә ҡаршы көрәшергә килә, әммә ахыр килеп Унан еңелә. Яхъя шулай уҡ, Һөйөнөслө Хәбәргә ҡаршы булып, Мәсих тураһында ялған тәғлимәт биргәндәрҙе лә «Мәсих дошмандары» тип атай.

**Мәсихсе** – Ғайса Мәсихтең артынан барған, Уны үҙенең Ҡотҡарыусыһы тип һанаған һәм Уның өйрәтеүҙәренә тап килерлек итеп йәшәргә тырышҡан кеше.

**Нун улы Ешуа** – Мусаның ярҙамсыһы, аҙаҡ, Муса үлгәндән һуң, еврейҙар башлығы булып китә. Уның етәкселеге аҫтында еврейҙар Ханаанды – Алла вәғәҙә иткән илде баҫып ала һәм унда күсеп ултыра.

**Нух** – Алла борон аҙғынлыҡҡа батҡан кешелекте юҡҡа сығарырға уйлай. Берҙән-бер тәҡүә кеше – Нух ҡына ғаиләһе менән тере ҡалырға тейеш була. Нух Алла ҡушыуы буйынса ҙур кәмә төҙөй. Ғаиләһе менән унда инеүгә, донъяны һыу баҫа башлай. Шулай итеп ошо ғаилә генә тере ҡала һәм яңы кешелек унан башланғыс ала (Тәураттың Башланмыш китабының 6-9-сы бүлектәрен ҡарағыҙ).

**Ожмах** – Тәураттың Башланмыш китабында (2-се бүлек) тәүге кешеләр Алла менән аралашып йәшәгән матур баҡса һүрәтләнгән. Ошо баҡса ожмах тип аталған да инде. Алланың әйткәнен һанға һуҡмағас, улар баҡсанан ҡыуыла һәм ауыр хеҙмәт башҡарып, ауырыуҙар кисереп, үлемгә дусар булып йәшәргә тейеш була. Ожмах тураһында әйткәндә, Ғайса Алла менән булған ошо хозур һәм вайымһыҙ, мәңге дауам итәсәк тормошто күҙ уңында тота.

**Палестина** – Изге Яҙмала бәйән ителгән төп ваҡиғалар булып уҙған Көнсығыш Урта диңгеҙҙәге илдең исеме. Был исем борон унда йәшәгән Филистея халҡынан килеп сыҡҡан. Уны шулай уҡ Ханаан йә Израиль ере тип атайҙар.

**Понтий Пилат** – Рим идарасыһы, Ғайса Йәһүҙә провинцияһы тарафынан язаланған мәлдәрҙә етәкселек итә (б. э. 26-36 й.й.). Уға хакимлыҡтың бөтә башҡа тармаҡтары буйһона, уның раҫлауы булмайынса, бер үлем язаһы ла ҡабул ителә алмаған. Понтий Пилаттың йәһүд башлыҡтары менән бәйләнеше көсөргәнешле була, әммә, баш күтәреүҙәргә юл ҡуймаҫ өсөн, ул йыш ҡына уларҙың талаптарына юл бирергә тейеш була.

**Пәйғәмбәр** – Алла Үҙенең ихтыярын халыҡҡа еткереү өсөн һайлап алған кеше. Изге Рух тәьҫире аҫтында пәйғәмбәрҙәр киләсәктәге хәлдәрҙе генә асып ҡалмаған, ә кешеләрҙе тәүбә итеп Аллаға килергә саҡырып, фаш итеүсе һәм нәсихәт биреүсе булып сығыш яһаған. Пәйғәмбәрҙәр Ғайса Мәсихтең килерен Ул тыуғанға тиклем әллә ҡасан уҡ әйткән. Иҫке Ғәһедтә күп пәйғәмбәрҙәр тураһында һөйләнелә һәм уларҙың пәйғәмбәрлеге бирелә; күп китаптар уларҙың исеме менән атала. Инжилдә йәнә Изге Рух көсө менән һөйләгән һәм Алла үҙенә аҫҡанды башҡаларға ла еткергән иман тотоусы пәйғәмбәрҙәр тураһында бәйән ителә.

**Раббы** (йәһ. *Адонай*, гр. *Куриос*) – Инжилдә ике төрлө мәғәнәне аңлата: 1. Иҫке Ғәһед аша таныш булған Алла исеме өсөн ҡулланыла (Сығыу 3:14-15) 2. Алланы кешеләр һәм бөтөн донъя өҫтөнән хакимлыҡ иткән «Хужа» мәғәнәһендә күрһәтә.

**Раббы көнө** – Раббы хөкөм менән киләсәк көн. Был көндө Алла Ғайса Мәсих аша тотош донъяны хөкөм итәсәк. Был көндө шулай уҡ «ҡиәмәт көнө» йәки «һуңғы көн» тип тә әйтәләр.

**Раббыны маҡтағыҙ** – боронғо йәһүд теләндә – «Аллилуя». Был өндәү йыш ҡына боронғо йәһүдтерҙең доғаларында һәм гимндарында осраған.

**Раббының даны, Раббының бөйөклөгө, Раббының данлы балҡыуы** – Алланың бөйөклөгөн белдерә, ул Уның был донъялағы ғәмәлдәре аша сағыла. Изге Яҙманан күренеүенсә, ҡайһы бер осраҡтарҙа Алланың даны израилдәргә туранан-тура, яҡты ут булып килә. Шулай ҙа Алла даны Уның тәҡүә кешеләрендә лә, иң тәүҙә Ғайса Мәсихтең тормошонда: күрһәткән мөғжизәләрендә һәм бигерәк тә арҡысаҡтағы үлеп терелеүендә сағыла.

**Рим** – Инжилдә һүрәтләнгән ваҡиғалар етеүгә, Рим ҡалаһы үҙенә Урта диңгеҙ тирәһендәге күп илдәрҙе, шул иҫәптән Палестинаны ла, буйһондора һәм император етәкләгән ҙур дәүләттең баш ҡалаһы булып китә. Палестинала римылар үҙҙәренең

ғәскәрен тота, күрһәтелгән һәр төрлө ҡаршылыҡты, башҡа буйһондоролған илдәрҙәге кеүек, ҡаты язаға тарттыра. Шулай уҡ берҙәм империяға ҡарау иҡтисадтың үҫеүенә һәм төрлө идеялар менән алышыуға булышлыҡ итә. Римдың үҙенең халҡы (шул иҫәптән илсе Павел) бөтөн империяла айырым хоҡуҡтар менән файҙалана. Мәҫәлән, хөкөм ваҡытында тик императорҙың хөкөмгә тарттырыуын талап итеүҙәре мөмкин.

**Рухани** – шаһитлыҡ сатыры һәм Алла Йортонда ҡорбан килтергән һәм башҡа дини вазифаларҙы башҡарған хеҙмәтселәр. Һарундың нәҫеле генә рухани хеҙмәтен башҡарған. Руханиҙар 12 төркөмгә бүленгән һәм алмашлап хеҙмәт алып барған. Улар менән баш руханиҙар етәкселек иткән.

**Саддукейҙар** – йәһүдтәрҙең ул осорҙағы төп дини ике төркөмдөң (фарисейҙар менән бергә) береһе. Юғары кәңәшмәнең күпселек ағзалары, баш руханиҙар һәм уларға яҡын кешеләр саддукейҙар булған. Икенсе төркөм – фарисейҙарҙан айырмалы рәүештә, Изге Яҙманың ғына абруйын танығандар, телдән-телгә күсеп йөрөгән риүәйәттәргә иһә ышанмағандар. Атап әйткәндә, улар «ҡиәмәт көнөндә Алла алдына баҫыр өсөн бөтөн үлеләр ҙә тереләсәк» тигәнде кире ҡаҡҡан.

**Самария кешеләре** – Ғайса дәүерендә Йәһүҙиәнең төньяғында, Самария тип аталған өлкәлә йәшәгән халыҡ. Улар, йәһүдтәр кеүек, Муса ҡанунын өҫтөн күргән, әммә күп нәмәне башҡаса аңлаған, атап әйткәндә, Аллаға Иерусалимда түгел, Гаризим тауында, улар өсөн иң изге урында табынған. Йәһүдтәр һәм Самария кешеләре бер-береһен ысын имандан баш тартыусы тип һанаған, шуға күрә бер-береһе менән хатта һөйләшмәҫкә тырышҡан.

**Самуил** – тәүҙә Саулды, аҙаҡ Дауытты батшалыҡ өсөн май һөрткән бөйөк пәйғәмбәр һәм Израилдең хакимы.

**Сара** – Ибраһимдың ҡатыны. Ул ил гиҙеүҙең бөтә ауырлыҡтарын ире менән бергә күтәрә, Аллаға һәр ваҡыт тоғро була һәм Уның биргән вәғәҙәләренең тормошҡа ашыуына өмөтләнә. Ғүмер буйы балаһыҙ йәшәгәндән һуң, олоғайып бөткәс кенә Ибраһимға Исхаҡ исемле ул табып бирә.

**Синай тауы** – Синай ярымутрауындағы тау (хәҙерге Мысырҙа). Ошо тауҙа Алла еврей халҡы менән килешеү төҙөй һәм Муса аша уларға ҡанун бирә.

**Сион тауы** – Иерусалим ҡалаһы урынлашҡан ҡалҡыулыҡтарҙың береһе. Шуға күрә был атама йыш ҡына Иерусалимдың үҙен

белдерә, шулай уҡ шартлы рәүештә тәҡүә кешеләр Алла менән мәңге бергә йәшәр күктәге Иерусалимды ла.

**Содом, Гоморра** – Алла был ҡалаларҙы кешеләрҙең әхлаҡһыҙлығы арҡаһында күктән ут менән яндыра. Был турала Тәураттың Башланмыш китабының 19-сы бүлегендә бәйән ителә.

**Сөләймән** – Дауыттың улы, Израилдең Дауыттан һуңғы батшаһы (б. э. тиклем X быуат). Сөләймән үҙенең зирәклеге менән дан ала һәм ул хакимлыҡ иткән дәүерҙә Израиль дәүләте сәскә атыу осорон кисерә. Сөләймән Иерусалимда тәүге Алла Йортон төҙөй, ә уға тиклем израилдәр Аллаға шаһитлыҡ сатыры алдында табына. Сөләймән исеме менән Иҫке Ғәһедтең ҡайһы бер китаптары бәйле: Сөләймәндең хикмәттәре, Екклезиаст, Гүзәлдәрҙән-гүзәл йыр.

**Сөннәткә ултыртыу** – ир баланың енес ағзаһы осондағы тирене киҫеп алыу. Алла Ибраһимға биргән әмер буйынса, һәр еврей малайы һигеҙенсе көнгә сөннәткә ултыртылған. Ғайса йәшәгән осорҙа балаға исем дә ошо көндә бирелгән. Сөннәтләү еврей халҡына тәғәйенлекте күрһәтеп тороусы билдә булған, һәм еврейҙар йыш ҡына «сөннәтләнгән» тип аталғандар. Бүтән Алланы белмәүсе халыҡтарҙы иһә, йәғни мәжүсиҙәрҙе «сөннәтләнмәгән» тип айырып атап йөрөткәндәр. Павел үҙенең хаттарында, Инжилдә кешене ниндәйҙер халыҡҡа тәғәйен булыу түгел, ә Ғайса Мәсихкә булған иман ҡотҡара, тип билдәләй, шуға күрә сөннәткә ултыртыу йолаһы элекке әһәмиәтенә эйә түгел.

**Сумдырыусы Яхъя** – Ғайса Мәсихтең килерен алдан әйткән һәм Уны хеҙмәт юлын башлаған мәлендә үк Иордан йылғаһында һыуға сумдырған пәйғәмбәр. Ғайса Мәсих әйткәнсә, Яхъя – «ҡасан да булһа тыуған кешеләр араһында» иң бөйөгө. Был исем бүтәндәрҙә лә осраған, мәҫәлән, илсе Яхъя.

**Таҙа, саф, пак** – Муса ҡануны буйынса, израилдәр таҙа менән бысраҡты, йәғни харамды ентекләп айырырға тейеш була. Бысраҡ тип айырым бер хайуан, ҡош һәм балыҡтар, әйберҙәр һәм ҡайһы бер аҙыҡ төрҙәре һаналған. Махау сирле кеше, мәйеткә ҡағылыусы, ҡатын-ҡыҙҙың күреме килгән мәл һәм бала тыуҙырғандан һуңғы осор ҙа шулай уҡ бысраҡҡа ингән. Таҙа булмаған кешеләр дини йолаларҙа ҡатнаша алмаған, уларҙың хатта пак кешеләргә ҡағылырға ла хаҡы булмаған. Ә инде

бысраҡ булыуҙан ҡотолғас, яңынан сафланыр өсөн, билдәле бер йолалар аша үтергә тейеш булалар.

**Тәүбәгә килеү** – кеше үҙенең тормошо гонаһлы булыуын һәм Алла теләгенә тап килмәгәнлеген аңлай һәм Алланан үҙенең гонаһтарын ярлыҡауын һорай. Артабан, бүтәнсә гонаһ ҡылмаҫҡа ныҡлы ҡарар ҡылып, Алла ихтыярына буйһоноп йәшәй.

**Уңыш байрамы** – йәһүдтәрҙең мөһим дини байрамдарының береһе. Ҡотҡарылыу байрамынан һуң илле көн үткәс билдәләнгән был көн уңыш йыйып алынып бөткән мәлгә тура килгән. Ошо байрам ваҡытында Мәсихтең шәкерттәренә Изге Рух ингән.

**Ураҙа тотоу** – ул ваҡыттарҙа был һүҙ тулыһынса ашауҙан тыйылыуҙы ғына түгел, ә күпмелер ваҡыт хатта һыу ҙа эсмәй тороуҙы аңлатҡан (ғәҙәттә көнө буйы). Шулай кеше үҙен Аллаға бағышлаған, Уға үҙенең тоғролоғон белдергән, ярлыҡау һораған һәм ярҙам итеүен үтенгән. Ҡайһы бер көндәрҙә ураҙа бөтә йәһүдтәргә лә мотлаҡ булған, мәҫәлән, йыл һайын билдәләнгән гонаһ йолоу көнөндә. Был көндә бөтә йәһүдтәр ҙә Алланан гонаһтарын ярлыҡауын һораған. Ҡайһы бер йәһүдтәр, башлыса фарисейҙар, өҫтәлмә ураҙа алған. Шулай уҡ айырым имандаштар берҙәмлеге лә, ниндәй ҙә булһа мөһим сәбәп өсөн бергәләп доға ҡылырға кәрәк булғанда, ураҙа тота алған.

**Үләләр донъяһы** – күп халыҡтар кеүек, ул ваҡыттарҙа еврейҙәр үлгәндән һуң кешенең йәне үләләр донъяһына күсә һәм уға ерҙәге тормошона иҫәп-хисап тоторға тура килә тип иҫәпләгән. Унда гонаһлыларҙы яза көткән.

**Үлеләр донъяһы**

**Үленән терелеү** – тормошҡа физик тәндә кире ҡайтыу. Ул ваҡыттарҙа күп еврейҙәр ҡиәмәт көнө еткәс, Алла хөкөмө алдына баҫыр өсөн, бөтә кешеләр ҙә терелəсәк тип ышанған. Ә Ғайсаның үлгән кешеләрҙе шунда уҡ терелтеүе, аҙаҡ Үҙенең терелеүе күрһәткән иң бөйөк мөғжизәләренең береһе була.

**Фарисейҙар** – Инжил ваҡытындағы еврейҙәрҙең ике төп (саддукейҙәр менән бергә) дини төркөмдөң береһе. Саддукейҙәрҙән айырмалы рәүештә, улар Изге Яҙманың талаптарын ғына үтәп ҡалмай, күп төрлө телдән-телгә күсеп йөрөгән риүәйәттәрҙе лә тоторға тырышҡан. Шулай уҡ, Алла алдына хөкөмгә баҫыр өсөн, ҡиәмәт көнөндә бөтә үләләр ҙә терелә тип һанағандар. Улар йоланың таҙалығын ентекле үтәгән, халыҡ араһында абруй яулаған, үҙҙәренең дини һәм ҡырыҫ холоҡло булыуҙары

менән ғорурланған. Дини йолаларҙы ҡаты тотмағандарға түбәнһетеп ҡараған.

**Фәрештә** – Аллаға хеҙмәт иткән һәм Алла ҡушыуы буйынса кешеләргә ярҙам күрһәткән, уларға Алла ихтыярын еткергән зат. Ҡайһы бер бигерәк тә әһәмиәтле һаналған фәрештәләр Изге Яҙмала исемдәре менән йөрөтөлә – Михаил, Ябраил. Үҙ мәлендә фәрештәләрҙең ҡайһы берҙәре Аллаға ҡаршы сыға һәм, Иблис яғына ауып, Уға буйһонмай башлай.

**Хаҡлыҡ** – Алла хаҡ, йәғни Уның бөтөн ғәмәлдәре хәҡиҡәткә һәм ғәҙеллеккә нигеҙләнгән. Инжилгә ярашлы, Алла гонаһтарҙы ярлыҡап, Үҙенең хаҡлығы менән бүләкләһә генә (был аҡлау тип атала) кеше ысын мәғәнәһендә хаҡ, йәғни тәҡүә була ала. Кеше үҙе лә башҡарған ғәмәлдәре, Алланың ихтыярын үтәргә тырышыуы менән хаҡлыҡҡа ынтылырға тейеш.

**Ханаандар** – израилдәр килгәнсе Палестинала йәшәгән халыҡтарҙы (уларҙы «кынаандар» тип тә әйтәләр) шулай атағандар. Ҡайһы берҙә ханаандар тип тирә-яҡтағы уларға туғандаш нәҫелдәрҙе, әйтәйек, Финикия кешеләрен әйткәндәр.

**Хәжәр** – Ибраһимдың ҡатыны Сараның ҡоло. Сара бала таба алмаған ваҡытта Хәжәр Ибраһимдан Исмәғил исемле ул таба. Әммә Ибраһимдың вариҫы булып аҙағыраҡ Алла нәҙере буйынса Саранан тыуған Исхаҡ ҡала. Сара Ибраһимдан Хәжәрҙе улы менән ҡыуып сығартып, үҙ аллы йәшәй башлауҙарына өлгәшә. Исмәғил дә Алланың фатихаһын ала. Унан бөйөк халыҡ тарала (исмәғилдәр, уларға ғәрәптәр ҙә үҙҙәрен индерә), әммә Хәжәрҙең улы барыбер Ибраһимдың вариҫы була алмай.

**Һабил** – Әҙәм менән Һауаның икенсе улы. Алла ул килтергән ҡорбанды хуш күреп ҡабул итә, ә ағаһы Ҡабилдыҡын кире ҡаға. Шунан һуң Ҡабил Һабилды үлтерә. Был кешелек тарихында тәүге үлтереү була.

**Һалым йыйыусы** – Палестинала Рим империяһының ҡаҙнаһына һалым йыйған кеше, урындағы халыҡ араһынан батшалыҡ өсөн һайлап алынған түрә. Еврейҙәр һалым йыйыусыларҙы мәжүси Рим башлыҡтары менән хеҙмәттәшлек иткәне өсөн күрә алмаған (бындай хеҙмәттәшлек еврейҙәр ҡанунына ҡапма-ҡаршы килгән). Бынан тыш, һалым йыйыусылар әленәнәле халыҡтан аҡса йыйып торған. Тейешлеһен башлыҡтарына биргәс, ҡалғанын үҙҙәренә алып ҡалғандар.

**Һарун** – Мусаның өлкән ағаһы, Левий быуынына ҡарай. Алла боронғо еврейҙарға Муса аша ҡанун биргән ваҡытта беренсе рухани итеп Һарун билдәләнә. Алла, бынан һуң тик уның нәҫеле генә рухани булһын, тип бойора.

**Һауа** – иң тәүге ҡатын-ҡыҙ, Әҙәмдең ҡатыны. Ожмахта йәшәгән саҡтарында, Иблис ҡотҡоһона бирелеп, Һауа менән Әҙәм Алла әмерен боҙа. Ошо ҡылыҡтары өсөн улар ожмахтан ҡыуыла. Һабил, Ҡабил һәм Сиф – уларҙың улдары.

**Һөйөнөслө Хәбәр** (гр. *эуангелион*) – Иҫке Ғәһедтә әйтелгән Һөйөнөслө Хәбәр кешеләргә Ғайса Мәсихтең ергә килеүе менән иғлан ителә. Был Хәбәр Алланың кешеләрҙе яратыуы һәм улар хаҡына ергә Үҙенең Улын ебәреүенән ғибәрәт. Уның арҡысаҡтағы үлеме һәм терелеүе аша бөтә кешеләр өсөн дә гонаһтарҙан һәм мәңгелек үлемдән ҡотолоу юлы асыласаҡ. Һөйөнөслө Хәбәр тәүҙән үк мәсихселәр (христианлыҡ) иманының нигеҙе булып тора.

**Һыуға сумдырылыу, һыуға сумдырыу йолаһын үтеү** – иң мөһим дини йолаларҙың береһе, ул кешенең таҙарыныуын һәм Аллаға бағышланыуын аңлата. Инжилдә был йоланың ике төрө бирелә. Тәүҙә Сумдырыусы Яхъя гонаһтарынан тәүбә итергә һәм Алла ихтыярын үтәргә теләгән кешеләрҙе һыуға сумдыра. Ғайса Мәсихтең үлеп терелеүенән һуң һыуға сумдырыу тәрәнерәк мәғәнә ала: кеше элекке гонаһлы тормошонан баш тарта, үлгәндәй була, әммә Мәсих аша яңы тормош өсөн терелә. Бындай йоланы үтәгәндән һуң мотлаҡ Изге Рух ҡабул иткәндәр. Инжилдәге күсмә мәғәнәләге «Ғайса ҡабул итәһе һыуға сумдырылыу» Ғайсаның ғазаптарында ҡатнашы булыуы, ә «Рухҡа сумдырылыу» Изге Рухтың кешегә инеүе тураһында һөйләй.

**Шаҡшы рух, ен** – яуыз рухтар, улар өҫтөнән Иблис хакимлыҡ итә. Был донъяла бик әүҙем була алалар, әйтәйек, ен берәйһенең эсенә инә лә, тулыһынса уны үҙ иркендә тота, шуға күрә уларҙан йыш ҡына ҡурҡҡандар. Шулай ҙа донъяла юғары хакимлыҡҡа Алла ғына эйә. Алла ҡөҙрәте менән Ғайса кешеләрҙе ендәрҙән ҡотҡарған, шулай уҡ был һәләтте Үҙенең илселәренә лә биргән.

**Шаһитлыҡ сатыры, изге сатыр** – ғәйәт ҙур сатыр рәүешендәге күсереп йөрөтмәле изге урын. Уны израилдәр Алла бойороғо буйынса эшләп, сүллекте гиҙеп йөрөгән саҡтарында үҙҙәре менән йөрөткән. Сатырҙа килешеү һандығы һаҡланған;

израилдәрҙең туҡталҡаһында был Алланың өйө тип һаналған. Сөләймән Иерусалимда Алла Йорто төҙөгәнсе, нәҡ шул шаһитлыҡ сатыры алдында еврейҙар Аллаға табынған һәм Уға ҡорбан килтергән.

**Шәмбе көн** – еврейҙарҙың изге көнө. Был көндә, Муса ҡануны буйынса, кеше үҙен тулыһынса Аллаға бағышларға тейеш була, шуға күрә эш эшләү тыйыла. Шәмбе һайын еврейҙар шаһитлыҡ сатыры алдына доға ҡылырға һәм изге китаптар уҡырға йыйыла. Аҙнаның яңы көнө ҡояш байығас башланған, шуға күрә йоманың кисенән шәмбенең ҡояш байыуына тиклем эш башҡарыу тыйылған. Инжил осоронда фарисейҙар шәмбе көн эшләргә ярамаған эштәрҙең ентекле исемлеген төҙөгән һәм ундағы талаптарҙың теүәл үтәлеүен талап иткән.

**Әҙәм** – Алла тарафынан туранан-тура яратылған тәүге кеше. Барлыҡ кешелек унан һәм уның ҡатыны Һауанан башланмыш алған. Әҙәм менән Һауа Алланың әмерен боҙоп, шуның менән гонаһ ҡылғандарҙың да тәүгеһе. Шунан һуң уларҙың тоҡомо гонаһ ҡыла башлаған, ә бының өсөн яза булып үлем торған. Мәсихте «һуңғы Әҙәм» тип атап, Павел Уның арҡылы кешелек яңынан тыуа тип күрһәтә. Хәҙер кешелек гонаһ ҡылынғанға тиклем Алла менән Әҙәмде бәйләп торған бәйләнештәргә кире ҡайтырға мөмкин.

**Әҙәм Улы** – еврейса был һүҙ тәүҙә «кеше» тигәндә аңлатҡан. Данил пәйғәмбәр киләсәк Батшаны шулай атай. Алла Уға бар халыҡтар өҫтөнән мәңгелек хакимлыҡ бирәсәк. Был исемде йыш ҡына Ғайса Үҙенә ҡарата ҡуллана.

**Юғары кәңәшмә** (гр. һәм рус. *Синедрион*) – йәһүдтәрҙең юғары кәңәшмәһе. Ул етмеш кешенән торған: руханиҙар, ҡанун белгестәре һәм бүтән мөһим кешеләр. Унда дини генә түгел, башҡа мәсьәләләр ҙә ҡаралған. Был кәңәшмә римлылар алдында йәһүд халҡының вәкиле булған һәм юғары хөкөм ролен уйнаған. Инжил дәүерендә юғары кәңәшмәнең мөһим ҡарарҙары Рим хакимлығы тарафынан раҫланырға тейеш булған.

**Юныс** – Алла пәйғәмбәре. Иҫке Ғәһедтең Юныс китабында Алланың нисек итеп уны Ниневияға, израилдәр өсөн дошман булған һәм аяуһыҙ Ассирия империяһының баш ҡалаһына вәғәзләргә саҡырыуы тураһында һөйләнелә. Ул, үҙенә тапшырылған был эште үтәүҙән баш тартып, ҡаршы яҡҡа йөҙөп китергә уйлай, әммә Алла карабҡа тәүҙә дауыл, унан

ҙур бер балыҡ ебәрә. Балыҡ Юнысты йота. Өс көндән һуң кикереп ебәрә һәм эсендәге «тотҡон» тышҡа килеп сыға. Юныс Ниневияға, ундағы халыҡ тәүбәгә килһен өсөн, вәғәзләргә китә.

**Яҡуб** – Исхаҡ менән Рабиғаның ике улының береһе. Яҡуб игеҙәге Исавтан һуңыраҡ тыуһа ла, Алла нәҡ уны һайлап ала һәм Яҡуб беренсе улдың хоҡуҡтарына эйә була. Унын ун ике улынан еврей халҡының ун ике быуыны башланғыс ала. Алла Яҡубҡа биргән «Израиль» исеме менән уның нәҫеле – еврей халҡы атала башлай. Аҙаҡ Яҡуб тигән исемде башҡаларға ла ҡуша башлайҙар, мәҫәлән, илселәрҙең береһенең исеме шундай.

**Яҡының** – һүҙмә-һүҙ «янындағы кеше». Иҫке Ғәһедтә бер ауыл кешеһе, йәмғиәт ағзаһы, ырыуҙаш шулай аталған һәм уға ҡарата билдәле бер ҡағиҙәләр үтәлергә тейеш булған. Ғайса Инжилдә, хатта таныш түгел кешенең дә һинең яҡының булып китеү мөмкинлегенә ишаралап, был аңлатманы киңәйтеп күрһәтә.

**Ялған илаһ** – мәжүсиҙәр табынған илаһтарҙың береһен сағылдырған таш һын йә бүтән берәй нәмә.

**Яңы килешеү** – Алланың кешеләр менән Ғайса аша төҙөгән килешеүе. Иҫке килешеүҙән айырмалы рәүештә, ул бөтөн кешелек менән төҙөлгән, шуға күрә кем Ғайса Мәсихкә инана, унда инә ала. «Яңы килешеү»ҙең мәғәнәһе Ғайса һәм Уның артынан эйәреүселәр тураһында бәйән ителгән китаптар йыйынтығы – Инжилдә күренә (йыйынтыҡ шулай уҡ «Яңы Ғәһед» тип йөрөтөлә). Был йыйынтыҡ б. э. I быуатында төрлө кешеләр тарафынан яҙылған һәм улар Иҫке Ғәһед менән икеһе бергә Изге Яҙманы тәшкил итә.

**Ярҙамсы** – грек теленән «хеҙмәт итеүсе» тигәнде аңлата. Тәүге имандаштар берҙәмлектәрендә улар, мохтаждар араһында ризыҡ һәм аҡса бүлеп, башлыса хужалыҡ эштәре менән шөғөлләнгән. Ирҙәр ҙә, ҡатындар ҙа ярҙамсы була алған.

**Яхъя** – Зеведейҙың улы һәм илсе Яҡубтың ҡустыһы, Ғайса Мәсихтең ун ике шәкерте араһында айырыуса яратҡан шәкерте. Инжилдәге тәүге дүрт «Һөйөнөслө Хәбәр»ҙең береһен ул яҙған, шулай уҡ өс хаттың авторы ла. Асылыш китабын да ул яҙған булырға тейеш. Был исем бүтән кешеләрҙә лә осраған, мәҫәлән, Сумдырыусы Яхъя.

# Изге Яҙмала һөйләнелгән ваҡиғалар булып уҙған урындарҙың географик карталары




Horace Knowles © The British & Foreign Bible Society 1954, 1967, 1972




Horace Knowles © The British & Foreign Bible Society 1954, 1967, 1972




Horace Knowles © The British & Foreign Bible Society 1954, 1967, 1972



Ғайса Мәсих
йәшәгән осорҙағы
Рим империяһы
Рим империяһының сиге
БРИТАНИЯ
ГЕРМАНИЯ
ГАЛЛИЯ
АЛАНДАР
Каспий диңгеҙе
ДАКИЯ
ИТАЛИЯ
Кара диңгеҙ
ӘРМӘНСТАН
ФРАКИЯ
Византия
МАКЕДОНИЯ
ГАЛАТИЯ
ИСПАНИЯ
Рим
АСИЯ ӨЛКӘҺЕ
Тарс
Антиохия
ГРЕЦИЯ
Ефес
Афина
Коринф
КИПР
Бөйөк диңгеҙ (Урта диңгеҙ)
СИЦИЛИЯ
Карфаген
Тир
Дамаск
ЙӘҺҮҘИӘ
Иерусалим
МАВРИТАНИЯ
КРИТ
Киринея (Кирена)
Искәндәриә
АФРИКА
МЫСЫР
Нил йылғаһы
Ҡыҙыл диңгеҙ
0 200 400 800
км
© UBS,1994


Илсе Павелдың
беренсе
эш сәфәре
КАППАДОКИЯ
Писидиялағы
Антиохия
Икония
Листра
Пергия
Дервия
Тарс
КРИТ
Антиохия
КИПР
Саламин
Паф
Урта диңгеҙ
0
125
250
500
км
Иерусалим
© UBS, 1994


Илсе Павелдың
икенсе
эш сәфәре
МАКЕДОНИЯ
Филипп
Верия
Фессалоника
Амфиполь
Троада
Коринф
Афина
Ефес
Писидиялағы
Антиохия
Икония
Листра
Дервия
Пергия
Тарс
Антиохия
КРИТ
КИПР
Паф
Саламин
Урта диңгез
Кесария
Самария
Иерусалим
0
125
250
500
км
© UBS, 1994


Илсе Павелдың
өсөнсө
эш сәфәре
МАКЕДОНИЯ
Амфиполь
Филипп
Верия
Неаполь
Фессалоника
Аполлония
Троада
Асс
АХАИЯ
Митилина
АСИЯ ӨЛКӘҺЕ
Пергам
Коринф
Смирна
Писидиялағы
Антиохия
Ефес
Икония
Милит
Листра
Дервия
Патара
РОДОС
Тарс
СҮРИӘ
Антиохия
Урта диңгеҙ
Тир
0
125
250
500
км
Птолемаида
Кесария
Иерусалим
© UBS, 1994


Римға сәйәхәт
Рим
Өс ҡунаҡхана
Путеол
ИТАЛИЯ
Ригия
СИЦИЛИЯ
Сиракузы
МАЛЬТА
КРИТ
Яҡшы гавандәр
РОДОС
Книд
ЛИКИЯ
Миры
КИПР
СҮРИӘ
Сидон
Кесария
Иерусалим
Урта диңгеҙ
0
125
250
500
км
© UBS, 1994

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Инеш һүҙ ........ 5

Матфей бәйән иткән һөйөнөслө хәбәр ........ 7
Марк бәйән иткән һөйөнөслө хәбәр ........ 79
Лука бәйән иткән һөйөнөслө хәбәр ........ 124
Яхъя бәйән иткән һөйөнөслө хәбәр ........ 203
Илселәрҙең ғәмәлдәре ........ 261
Яҡубтың хаты ........ 331
Петрҙың беренсе хаты ........ 338
Петрҙың икенсе хаты ........ 346
Яхъяның беренсе хаты ........ 351
Яхъяның икенсе хаты ........ 358
Яхъяның өсөнсө хаты ........ 359
Йәһүҙәнең хаты ........ 361
Павелдың Римдағы имандаштарға яҙған хаты ........ 364
Павелдың Коринфтағы имандаштарға яҙған беренсе хаты ........ 392
Павелдың Коринфтағы имандаштарға яҙған икенсе хаты ........ 418
Павелдың Галатиялағы имандаштарға яҙған хаты ........ 436
Павелдың Ефестағы имандаштарға яҙған хаты ........ 446
Павелдың Филиптағы имандаштарға яҙған хаты ........ 455
Павелдың Колосстағы имандаштарға яҙған хаты ........ 462
Павелдың Фессалоникалағы имандаштарға яҙған беренсе хаты ........ 469
Павелдың Фессалоникалағы имандаштарға яҙған икенсе хаты ........ 475
Павелдың Тимофейға яҙған беренсе хаты ........ 479
Павелдың Тимофейға яҙған икенсе хаты ........ 496
Павелдың Титҡа яҙған хаты ........ 492
Павелдың Филимонға яҙған хаты ........ 495
Еврейҙарға хат ........ 497
Яхъяға килгән асылыш ........ 520

Һүҙлек ........ 557
Карталар ........ 581

# ИНЖИЛ
## башҡорт телендә

*Новый Завет*
*на башкирском языке*

*New Testament*
*in Bashkir*

Институт перевода Библии
www.ibt.org.ru; ibt_inform@ibt.org.ru
101000 Россия, Москва, Главпочтамт, а/я 360

Подписано в печать 29.12.2014
Формат 60×90 1/16. Печать офсетная. Усл. печ. л. 37,0
Тираж 6000 экз. Заказ № 2.0012.15

Отпечатано с готовых файлов
в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан
Уфимский полиграфкомбинат
450001, г. Уфа, пр. Октября, 2
Тел. 8(347)-223-77-01, 8(347)-223-97-00
www.upkrb.ru; upkrb@mail.ru, upkrb.ru@gmail.com